*Роберт ӘХМӘҘУЛЛИН,*
*Өфө районы башҡорттары королтайы*
*Башҡарма комитеты рәйесе*



# Заман һулышын тойоп

Өфө районы Башҡортостан Республикаһының башҡалаһы Өфө төбәгендә урынлашҡан, йәғни район ауылдары унын тирә-яғына һибелеп ята. Әлбиттә, был беҙҙең эште еңеләйтә, сөнки үҙәк менән бәйләнеш мәсьәләһе тормай. Эшебеҙҙе Бөтә донъя башҡорттары королтайы Башҡарма комитеты менән тығыҙ бәйләнештә алып барабыҙ. Бынан тыш Өфө район Советы башҡарма комитеты менән берлектә төҙөлгән план нигеҙендә эшләйбеҙ. Шуны әйтергә кәрәк, райондың королтай башҡарма комитеты Башҡортостаныбыҙҙың яңы быуыны —үҫмерҙәрҙе, йәштәрҙе тәрбиәләүгә айырыуса ҙур иғтибар бирә. Сөнки киләсәккә бөгөн нигеҙ һалына, тәрбиә өлкәһендә иғтибар етмәгән тармаҡтар байтаҡ. Был йәһәттән район мәктәптәренең эшен йәнләндереү, күбеһенең эшен Башҡортостан Республикаһы Конституцияһы, тел тураһында яңы закондар нигеҙендә үҙгәртеп ҡороу кәрәк булды.

Өфө районында 41 дөйөм белем биреү мәктәбе булып, шуларҙың 26-һында башҡорт телен 606 уҡыусы туған теле булараҡ, ә 4241 уҡыусы дәүләт теле итеп өйрәнә. Ольховка һәм Авдон урта мәктәптәрендә иһә уҡыусылар рус теле менән рәттән башҡорт һәм татар телдәрен өйрәнә. Яңы Жуково һәм Зубово дөйөм белем биреү мәктәптәрендә башҡорт телен өйрәнеү ике сәғәтлек программа буйынса алып барыла. Әлбиттә, дәүләт телен өйрәнеү өсөн был ғына етмәй.

Райондың башҡорт теле уҡытыусылары үҙ эшенә яуаплы ҡарай. Йыл һайын 5-6 тапҡыр башҡорт теле дәрестәрен уҡытыуҙы камиллаштырыу мәсьәләләре буйынса семинарҙар үткәрелә. Башҡорт теле аҙналыҡтары иһә ҡыҙыҡлы сараларға айырыуса бай: унда сәсәндәр, шиғыр уҡыусылар бәйгеһе, һүрәт төшөрөүселәр, милли аш-һыу оҫталары конкурстары үтә, башҡорт халыҡ әкиәттәре сәхнәләштерелә. Мәҫәлән, уҙған йылдың май айында Авдон урта дөйөм белем мәктәбендә башҡорт теле уҡытыусыларының королтайы булып, унда Бөтә донъя башҡорттары королтайы Башҡарма комитеты рәйесе урынбаҫары, Башҡорт халҡын үҫтереү фонды директоры Ә.Ә. Ғәйфуллин, БР-ның Дәүләт Йыйылышы —Ҡоролтайҙың Закондар сығарыу Палатаһы депутаты, шағирә Г.Р. Ситдиҡова, Өфө күҙ ауырыуҙары институтының баш табибы урынбаҫары, медицина фәндәре кандидаты Ғ.Ҡ. Мәмбәтҡоловалар ҡатнашты.

Октябрь айында иһә Республика көнөнә арналған «Йәш сәсәндәр конкурсы» бик уңышлы үтте һәм районда байтаҡ һәләтле йәштәр булыуы асыҡланды.

Туған телдең нигеҙе ғаиләлә, артабан балалар баҡсаһында һалыныуы һәр кемгә билдәле. Шуға күрә Өфө районының балалар баҡсаларында ла туған телде өйрәнеүгә ҙур иғтибар бирелә. Әле беҙҙәге 30 мәктәпкәсә йәштәге балалар учреждениеһында 1917 бала тәрбиә ала. Балалар баҡсаларында тыуған яҡты, халҡыбыҙҙың һәм республикала йәшәгән башҡа милләт вәкилдәренең ғөрөф-ғәҙәттәрен, йола-традицияларын өйрәнеү эше әүҙем бара. Төркөмдәрҙең бүлмәләрендә милли символика, милли кейем өлгөләре ҡуйылған мөйөштәр булдырылған, йыш ҡына балаларҙың һәм уларҙың ата-әсәләренең берлектәге күргәҙмәләре ойоштоpола. Милли телдәрҙе өйрәнеү буйынса алты түңәрәк эшләп килә. Мәҫәлән, Нурлы ауылындағы «Ал сәскә» балалар баҡсаһында «Гөл баҡса», Миловкала — «Тамсылар», Авдон ҡасабаһында «Ләйсән» түңәрәктәре әүҙем эш алып бара. Уҙған йыл Ольховка мәктәбендә «2001 йылдың иң яҡшы башҡорт теле уҡытыусыһы» конкурсы үтте. Унда Нижегородка урта мәктәбе уҡытыусыһы Г.Ҡ. Мәмбәтҡолова еңеүсе булды.

Ғөмүмән, Ҡоролтай башҡарма комитеты ағзалары район кимәлендә уҙғарылған бөтә сараларҙа әүҙем ҡатнаша. Һуңғы йылдарҙа районд ың ауыл һәм ҡасабаларын төҙөкләндереүгә, газ үткәреүгә иғтибар көсәйҙе. Президентыбыҙ тарафынан иғлан ителгән «Ғаилә йылы» (2000), «Әсә йылы» (2001) һөҙөмтәләренең ҡыуаныслы булыуында ла Ҡоролтай башҡарма комитетының тос өлөшө бар.

Шуны ла әйтеп үтергә кәрәк, беҙҙең башҡарма комитет сыуаштарҙың канаш, татарҙарҙың съезд, рустарҙың соборҙары башҡарма комитеттары менән тығыҙ бәйләнештә эш алып бара. Төрлө иҫтәлекле ваҡиғаларға, Республика көнө, 8 Март байрамына арналған шиғыр, йыр һәм бейеү бәйгеләре ғәҙәттә берлектәге тырышлыҡ менән атҡарыла һәм бик уңышлы үтә.

Төрлө милләт вәкилдәре бер ғаилә булып йәшәгән Өфө районы халҡы заман һулышын тойоп, киләсәккә ҙур өмөттәр бағлап йәшәй.



1 ÷àñòü 3-2002.p65 21 29.07.02, 20:32